■ Рамаҙан һәм балалар

РАМАҘАН АЙЫ БАЛАЛАРҒА ИҘТӘ ҠАЛЫРЛЫҠ БУЛЫП ҮТҺЕН

Мария МИЛЛЕР,
Оксана НАЗАРОВА тәржемәһе

Йыл һайын беҙ Аллаһы Тәғәләнең ризалығына ирешеүҙә тиңе һәм сиге булмаған Рамаҙан айын көтеп алабыҙ, тик был бәрәкәтле көндәр тиҙ генә үтә лә китә. Ҡайһы бер эштәр башҡарылмай, уй-ниәттәр тормошҡа ашмай ҡала, шуға ла күңел төшөнкөлөгө барлыҡҡа килә. Быйылғы Рамаҙанға ентеклерәк әҙерләнергә тәҡдим итәм. Сабыйҙарыҙыҡ был көндәрҙе нисек үткәреүҙәре тураһында ла уйланырға ваҡыт. Бала сәкәтәгә көслә тәьсораттар бер ҡаҫан да онотолмай, шул айҡанлы ураҙа тотоуға ыңғай мөнәсәбәтте хәҙерҙән үк барлыҡҡа килтерер кәрәк.

Рамаҙан айын балалар өсөн ҡыҙыҡлы, иҫтә ҡалырлыҡ итеп үткәрергә теләүселәргә бер нисә кәңәш:

1. Йыйын

Рамаҙан башланыр алдынан бар ғаиләгеҙ менән йыйылып, был ай хаҡында әңгәмәләшеп алығыҙ. Һәр берегеҙ белгәндәре, уй-фекерҙәре менән уртаҡлашһын: ураҙа тотоуҙың әһәмиәте, көн тәртибенең үҙгәреүе, был айҙа нимә эшләргә ярауы, йә ярамауы хаҡында һөйләшегеҙ.

2. Рамаҙан айын байрам кеүек ҡаршы алыу

Ураҙа - Аллаһтың ҙур бүләге. Ун бер ай буйына беҙ иҫкереп, бысранып бөтәбеҙ: ғәйбәт тә һөйләйбеҙ, тәккәберләнәбеҙ ҙә, онытылып китеп, гонаһҡа батабыҙ. Дөрөҫ, ул айҙарҙа ла Аллаһ таҙарыныу юлдарын күрһәткән - зекер әйтеү, тәсбих тартыу, намаҙ. Ә инде Рамаҙан ураҙаһы - генераль таҙарыныу. Рамаҙан - Сәләмәтлек, Бәрәкәт айы (ризыҡтарыбыҙ, ғәмәлдәребеҙ бәрәкәтле, ғәмәлдәребеҙгә ҡарата әжер-сауабы күп була торған ай). Был ай - Шатлыҡ айы (Пәйғәмбәребеҙгә Ҡөрьән төшөрөлгән ай), Уңыш айы (бер изгелеккә мең изгелек яҙыла торған ай), һуғыш айы (нәфсебеҙ менән һуғышып, Аллаһы Тәғәлә рәхмәтенә ирешә торған ай) һәм Доғалар ҡабул була торған ай.

Шуға ла "Рамаҙан айы мөбәрәк булһын!" тигән һүҙҙәр менән генә сикләнеп ҡалмағыҙ, өйөгөҙҙә биҙәгеҙ, балалар шарҙар өрөп үҙҙәренең бүлмәләрен матурлаһындар. Бергәләп плакат эшләгеҙ, унда көн тәртибе, төрлө иҫкәртмәләр, гәзит-журналдарҙан алынған мәҡәләләр булыуы мөмкин.

3. Рамаҙан айы хаҡында хикәйәләр, иҫтәлектәр һөйләү

Һәр кис Рамаҙан айы тураһында хикәйәләр һөйләгеҙ. Улар китаптарҙан ғына алынған булмаһын, улығыҙ йә ҡыҙығыҙҙың ураҙа тотоуы тураһында әкиәт уйлап сығара алаһығыҙ, үҙегеҙҙең бәләкәй сәкәтә был көндәрҙе нисек үткәреүегеҙ хаҡында ла әйтеп ишеттерегеҙ.

4. Кискәйҙәргә лә бер нисә сәғәт ураҙа тоторға рөхсәт итегеҙ

Ураҙа тоткан әсәй-атайын, апай-ағайҙарын күргән бала уларға оҡшатып ашамай, әсмәй йөрөгөһө килә. Был теләкте хуплағыҙ. Ул ике генә сәғәт булһа ла ураҙа тотоп ҡараһын. Ә "ифтарға" балағыҙҙың яратҡан ашамлығын әҙерләрһегеҙ.

5. Класташтар өсөн бүләктәр һәм презентация әҙерләгеҙ

Алдан уҡ класс етәксеһе менән һөйләшеп ҡуйып, балаларығыҙҙың һабаҡташтарына кәнфит, бәләкәй генә уйынсыҡтар, ҡәләмдәр, Рамаҙан айы тураһында ике-өс һөйләмдә аңлатылып яҙылған открыткалар бирегеҙ.

Класс етәксеһе риза икән, дәрестәрҙән һуң Рамаҙан айы хаҡында презентация үткәрегеҙ. Балаларығыҙ викторина әҙерләһен, бәләкәй сәхнә әҫәре ҡуйһындар. Класта икенсе диндәге балалар булһа, уларҙың ураҙаһы нисегерәк үтеүе тураһында һөйләүҙәрен һорағыҙ.

6. Рамаҙан хаҡында ваҡтәйәк нәмәләр, һүрәттәр эшләү

Һүрәт төшөрөү - Рамаҙан айы тураһында белем биреү өсөн бик яҡшы ысул. Журналдарҙан ҡырҡып алып ифтар ваҡытында ашарға теләгән ризыҡтарҙың һүрәттәренән плакат эшләп була. Бер тапҡыр ҡулланыла торған һауыт-һабаны биҙәп байрам өҫтәлен йәмләндереп тә ебәрегеҙ.

Дуҫтарығыҙға, әләсәй-ҡартатайҙарығыҙға, алыҫ туғандарығыҙға открыткалар эшләгеҙ.

7. Айлы төндә саф һауала йөрөп килегеҙ

Балаларығыҙ менән Ай һәм йондоҙҙар яҡшы күренгән ергә сәйәхәт ойоштороғоҙ. Машинаға ултырып ҡала ситенә сығыу мөмкинлеге булмаһа, бәлки, бындай ерҙе ейәү йөрөп табып булыр. Бинокль йә телескоп алып сыҡһағыҙ, бик яҡшы!

8. Ифтар

Балаларығыҙҙың дуҫтарын кискәйҙәр өсөн генә әҙерләнгән ифтарға саҡырығыҙ. Улар үҙҙәре ҡунаҡтар исемлегән, меню төҙөһөн, һеҙгә ашһыу әҙерләргә ярҙам итһендәр. Ураҙа тоткан кешеләрҙе һыйлаусылар ниндәй сауап алыуҙары тураһында һөйләгеҙ.

Өләсәйҙәр, ҡартатайҙар өсөн дә айырым ифтар үткәрегеҙ. Оло кешеләрҙән Рамаҙан хаҡында хикәйәләр, иҫтәлектәр һөйләүҙәрен һорағыҙ: улар бәләкәй булғанда Ураҙа нисек үткән, нимә менән туҡланғандар һ.б.

9. Тәрәүих намаҙына бергәләп йөрөгөҙ

Ял көндәрендә, өйгә бирелгән эштәре әҙерәк булған сәкәтә балаларығыҙ ҙа һеҙҙең менән мәсеткә барып, Тәрәүих намаҙын уҡыһын. Рамаҙан айының ни тиклем ҙур ваҡиға икәнен мосолмандар йыйылған ерҙә - Аллаһ йортонда ғына тулыһынса тойоп була. Бәлки, кискәйҙәрегеҙ үҙҙәренә дуҫтар ҙа табырҙар.

10. Мохтаж булған кешеләргә ярҙам итеү

Ярлыларға изгелек күрһәтеү өсөн айырым бер көндө лә билдәләп ҡуйып була. Мәсеттә үткәрелгән кисәләргә алданырақ барып, йә аҡсалата, йә былай ярҙамлашығыҙ. Күстәнестәр алып, мохтаж булған ғаиләләрҙең хәлен белә барығыҙ.

11. Мөнәжәттәр тыңлау

Балалар уйнап йөрөгән сәкәтә уларға бер юлы мөнәжәттәр тыңлатып була. Алдан уҡ үҙ телегеҙҙә йырланғандарҙы табып ҡарағыҙ. Булмаһа, инглиз телендә йә балағыҙ мәктәптә өйрәнгән икенсе бер сит телдә башҡарылғандарын һайлағыҙ. Иң ныҡ оҡшағандың һүҙҙәрен ятлап, ваҡыт-ваҡыты менән бергәләп йырлағыҙ.

12. "Рамаҙан - 2010" исемле китап сығарығыҙ

Ураҙа ваҡытында көндәлек алып барығыҙ, дәфтәр гел күренгән генә ерҙә ятһын. Ай башында һәр берегеҙ үҙенә өс маҡсат ҡуйһын. Ә Ғәйет көнөндә өлгәшкән уңыштарҙы барлап, был айға йомғаҡ яһағыҙ.

Өс маҡсатын да тормошҡа ашырған балаларығыҙға бүләк бирегеҙ. Быларҙың барыһы ла иҫтәлек булып "Рамаҙан - 2010" тигән китапҡа яҙылһын.

Иң мөһиме, телевизор алдында тик ултырыуҙан, юҡҡа ваҡыт уҙғарыуҙан баш тартығыҙ. Балаларығыҙ менән Ҡөрьән уҡып, аяттар ятлап ҡалығыҙ.

Был айҙа башҡарабашҡара күнегеп бөткән яҡшы эштәр һеҙҙе йыл дауамында ҡалдырмаһын! Амин!

Халыҡты бергә туплаусы, уның рухын байытыусы

Фәрит ҠОҘАБАЕВ

3 июлдә Хәйбулла районының Вәлит ауылында район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты Ғатаулла ишан, Зәйнулла ишан, Ғабдулла Сәиди ишан, Мөжәүир хәҙрәт һәм башҡа танылған дин әһелдәре, әүлиәләр рухына бағышлап, шулай уҡ Башҡортостаныбыҙҙың именлеге өсөн аяттар, доғалар уҡыуға арналған йыйын ойоштороҙо.

Был ҡорға Мәскәү, Өфө, Сибай ҡалаларынан, Баймаҡ, Йылайыр, Хәйбулла райондарынан диндарҙар, динде күңеленә яҡын итеүселәр килгәйне.

Бүребай ауылынан Зәйнулла хажи йыйынды асыҡ тип иғлан иткәндән һуң, Вәлит ауылының имам хатибы Фәнил хәҙрәт үрҙә телгә алынған дин әһелдәрен иҫкә алыуға арнап, ил-йортобоҙға именлек, бәрәкәт теләп, аят бағышланы.

Шунан һуң һүҙ район хакимиәте башлығы Р.А. Бикбовҡа бирелде. Ул үзенең телмәрендә: "Беҙҙең тамырҙарыбыҙ бергә тоташҡан, беҙҙе уртаҡ тарих, мәҙәниәт, дин, атабабаларыбыҙ ере берләштерә. Үткәндәрҙе күҙ алдына килтереп, әле беҙ йәшәгән һәм эшләгән бөгөнгөбөҙгә баһа биреп шуны әйтә алабыҙ: тарихыбыҙ Ғатаулла ишан, Зәйнулла ишан... кеүек шәхестәребеҙ тарафынан яҙыла ла инде. Хәҙерге һәм киләһе быуындар уларҙың үҙ тыуған төйәгенә сикһеҙ һөйөүе, рухи мәғрифәтселек идеяларында һәм гуманлы ҡиммәттәребеҙгә тоғролоғо өлгөһөндә тәрбиәләнергә тейеш... Үткәндәребеҙҙе хөрмәт итмәһәк, киләсәгебеҙҙе төҙөү еңел булмаясаҡ", - тине.

Йылайыр районы мөхтәсибе Йәғәфәр хәҙрәт берҙәм, ихлас булыу кәрәклеге хаҡында һөйләне. Уның әйтеүенсә, шул осраҡта ғына иманлы, рухлы һәм дин ҡәрҙәшебеҙ илебеҙҙе яклап һүҙ әйтеү, халыҡ мәнфәғәттәре өсөн бөйөк эштәр башҡарыу, ҡара көстәргә ҡаршы тороу ҡеүәтенә эйә буласаҡ!

Йыйында Аллаһы Тәғәләнән ямғыр һорап, теләк намаҙы ла уҡылды.

Мәскәү ҡалаһынан килгән САД нәшриәт төркөмө мөхәррире Айҙар Хәбибуллиндың һүҙҙәренә лә иғтибар итәйек:

- Күптәрҙә шундай һорау тыуа: кемдәр булған ул Ғатаулла ишан, Зәйнулла ишан, Мөжәүир хәҙрәт. Нимә менән шөғөлләнгәндәр?

Белеүебеҙсә, Зәйнулла ишан менән Ғатаулла ишан суфыйсылыҡ мәсьәләһендә бик яҡын фекерҙәштәр булған, ҡатнашып йәшәгәндәр. Төркиәлә Истанбулда булып, Нәҡшбәнд тәғлимәтен уҡытыуға рөхсәт алғандар. Бөгөнгө дини йолаларҙың ҡайһы берҙәре улар ярҙамында ҡулланыла башлаған. Мәҫәлән, ҡыҫҡырып зекер әйтеү, Мәүлит байрамын үткәреү, тиҫбе алып йөрөү һәм башҡалар. Ләкин был яңылыҡты таратыуҙа улар күп ҡаршылыҡтарға осраған, шулай ҙа сигенмәгәндер.

Хәлил Ибраһимов әйтеүенсә, Зәйнулла Рәсүлевтың фекерҙәше, көрәштәше Ғатаулла Әбделмәликов тураһында әлегә әҙ беләбеҙ. Рәшит Шәкүр, Рәүеф Насыровтың әҙме-күпме был шәхес хаҡында тапҡан мәғлүмәттәрҙән шул билдәле - Зәйнулла ишан ил гиҙгән, аҡыл туплаған осорҙа уның тоғро юлдашы Ғатаулла ишан булған. Хәлил Ибраһимов уның шәжәрә ебен дә барланы.

Хәҙер Ғатаулла ишандың вариҫтары Вәлит ауылында йәшәй. "Бөгөн беҙҙең мәшһүр зат ерләнгән ерҙә йыйылыуыбыҙ юҡҡа түгел. Шундай шәхестәр халыҡҡа аҡ-белем таратҡан, улар тарихыбыҙҙың ҙур өлөшөн алып тора", - тип аңлатты ул.

Өфө ҡалаһында йәшәүсе Салауат Килдин һүҙҙәре буйынса, заманында Ғатаулла ишан, Зәйнулла ишан, Ғабдулла Сәиди ишан һәм башҡалар 20-30 йыл буйы халыҡ араһында эш алып барған. Сөнки улар халыҡтың көсө диндә икәнен яҡшы аңлаған. "Тағы ла, беҙҙең көсөбөҙ рухи хәтерҙә. Рухи хәтер сәнғәт, мәҙәниәт кенә түгел, Аллаһ менән бәйләнеш тигәнде лә аңлата. Бына шул бәйләнеште беҙҙең халыҡ үҙенә ҡайтара алһа, ул бер төптән көслө буласаҡ", - тине ул.

Йыйын тамам. Халыҡ таралышты. Һәр кемеһе ошо саранан күңеле сафланып, пакланып, иман нуры алып ҡайткандыр, тип уйлайбыҙ.